


ижад

## ҠАНАТЛЫ ҠОШ БУЛАМ

*Тик изгелектәр ҡылам,*
*Яҡшыға ынтылам,*
*Кемгәләр ярҙам итһәм,*
*Ҡанатлы ҡош булам.*
*Теләмәйем бер кемгә*
*Боҙоҡлоҡ, яманлыҡ,*
*Асыҡ минең күңелем,*
*Дуҫтарымдан ундым нык.*
*Туғандарым алдында*
*Ғәйеплемен, тип әйтмәм,*
*Ғәфү итеүҙе һорап,*
*Ауыр йөк йөрөтмәм.*
** * **
*Бисмиллаһи-рахманир-*
*рахим, тип,*
*Уң аяҡман көн дә керәм*
*Бөйөк белем йорто эсенә.*
*Үҙемде унда бәхетле һиҙәм,*
*Һауҙыҡ биреп, хәлдәрен белеп,*
*Балалар алдына баҫам.*
*Аллаҡайым ярҙамын бирһен*
*Белемемде һөйләп торғанда,*
*Тыңлаһалар, аңлаһалар,*
*Аллаһ блыман барһалар,*
*Ғәмәл дәфтәрҙәре тулыр,*
*Йәмле тормоштар булыр*
*Һәм еңеллек донъяла,*
*Барыбыҙға насип булһын!*
*Һәр балаға әйтке килә*
*Башымдағы булған белемде,*
*Йөрәгемдән сыҡҡан*
*ялҡындарҙы,*
*Телемдәге татлы һүҙҙәрҙе!*

**Әҙһәм ЙОМАҒУЖИН,**
**Ҡолой ауылы.**



ғилми конференция

# Онотмағыҙ туған телде

***1999 йылдан ЮНЕСКО билдәләүе буйынса, 21 февраль — Халыҡ-ара тыуған телдәр көнө тип йөрөтөлә. 2009 йылда ЮНЕСКО "Юғалыу хәүефе яныған донъя телдәренең атласы"н әҙерләне. Унда әйтелгәнсә, әле Рәсәйҙә 136 телгә, шул иҫәптән башҡорт теленә лә, юғалыу хәүефе яный.***

Силәбе дәүләт университетында ошондай көнүҙәк проблема тураһында етди һөйләшеү өсөн Силәбе һәм Курған өлкәһе туған тел уҡытыусыларын йыйҙы ғилми конференция. Былдай үтә мөһим сара Силәбелә беренсе тапҡыр ойошторолдо. Уға Башҡортостандың 100 йыллығы, Бөтә Рәсәй башҡорт теле уҡытыусыларының беренсе тарихи съезы һәм алда уҙасаҡ Бишенсе Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы этәргес булды.

Был форумда Башҡортостандың Силәбеләге вәкиле Амур Хәбибуллин, Силәбе дәүләт университетының беренсе проректоры Андрей Петров, Евразия һәм Көнсығыш факультеты деканы Эльвина Ягнакова, Силәбе башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Морис Йосопов, Ижтимағи ойошмалар Ассоциацияһы Советы рәйесе Руил Асатулин ҡатнашты. Пленар ултырышта улар конференцияның бик мөһим проблемаға арналыуын билдәләнеләр һәм ҡатнашыусыларҙы тәбрикләнеләр. Уның эшен Силәбе өлкәһенең Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә етәксеһе, филология фәндәре кандидаты Ҡамса Мортазин алып барҙы.

Әҙәби-музыкаль сәләмләүҙә Арғаяш районының Дәрбиш урта мәктәбе уҡыусыһы, шиғыр уҡыусыларҙың өлкә конкурсы призеры Гөлназ Сибәғәтуллина Рәшит Назаровтың "Туған тел" шиғырын йөрәкһеп уҡып ишеттерһә, "Дуҫлыҡ моңо" халыҡ-ара конкурс дипломанты Гөлли Фәхриеваның "Илемә бата теләк" ҡобайырын думбра менән башҡарыуы йөрәктәрҙең иң нескә ҡылдарына сиртеп ебәргәндер, моғайын.

Башҡортостан белгестәре йыйынға мәртәбә өҫтәне. Республика мәғарифын үҫтереү институтының методин ресурстар үҙәгенән Илгиз Сәлихов "Төбәктәрҙә туған телде уҡытыу" тигән тема менән сығыш яһаны. Ә бына Башҡорт дәүләт университеты Стәрлетамаҡ филиалы уҡытыусылары Руслан Кәримов менән Илнур Дилмөхәмәтов "Электрон уйын мәктәбе" тигән сығыштары заман балаларын туған телгә ылыҡтыу юҫығында булды. Был ҡунаҡтарҙың сығыштары уҡытыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уятты, "Һеҙҙең килеүегеҙ дуҫлыҡ күперенең башы булһын!" тигән теләктәр яңғыраны.

Әйткәндәй, ашаған белмәй, тураған белә инде. Туған тел уҡытыу проблемаларын хәл итеү директорӘарӘан башланалыр. Бына ошо йәәәттән ҡарағанда Сосновка районының Сиреүсе урта мәктәбе директоры Әлфиә Ҡотлохужина ысын милләт әсәһе булып әлеге көрсөк хаҡында йыйында әсенеп сығыш яһаны. Ул Бөтә Рәсәй туған тел уҡытыусылары съезы делегаты буларак, уҙған оло йыйын хаҡында ҡыҫҡа мәғлүмәт биргәндән һуң, төбәктә торған иң ҡырҡыу проблемаларҙы һанап сығып: "Уҡытыусыларға методик ярҙам күрһәтеү өсөн Силәбе мәғарифты үҫтереү институтында штат булдырыуҙы юллайыҡ", — тине, һығымта яһап.

Арғаяш районы Байрамғол урта мәктәбе уҡытыусыһы Гөлфиә Рәхмәтуллина туған тел уҡытыу торошо менән таныштырһа, Курған өлкәһенең Сафаҡул районы Һөләймән урта мәктәбе уҡытыусыһы Йәлил Садыҡов үҙ ҡыйынлыҡтары хаҡында һөйләне. Ҡоншаҡ районының Тәхәлем урта мәктәбенән Зөмфира Байрамғәлина менән Зимфера Шафранская сығыш яһынылар. Улар ҙа бер-береһен ҡабатламайса артабан эшләнәһе эштәрҙе ойоштороу әәм тәрәнәйтеү тураһында һүҙ алып барҙылар. Земфира Ирек ҡыҙы уҡытыу программалары, дәреслектәр һәм уҡытыусылар өсөн методик кәңәшмәләр уҙғарыу кеүек мәсьәләләрҙә туҡталды, ә бына Зимфера Ғәфүр ҡыҙы уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү проблемаһына баҫым яһаны. Ул үҙе район әҙәби берекмә ағзаһы буларак, "ижад кешеһендә фәтеүә бар" тигән фекерҙе яҡлап, киләсәктә был юҫыҡта башланған матур эштәрҙе артабан дауам итеп әҙәби семинарҙар ойоштороу кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Йыйын тупланып бергә эшләйек тигән һығымтаға килде. Артабан эштәрҙе көйләү өсөн ошо талапты күҙ уңында тотоп Башҡортостан вәкиле Амур Хәбибуллин Ассоциация булдырыуға саҡырҙы. Сыбаркүл районы Ҡоротан урта мәктәбе директоры Мәғәфүр Садрый улы Юмашев уның бик эшлекле тәҡдимен хуплап сығыш яһаны. Ағинәйҙәр ҡоро рәйесе Рәбиғә Бикбулатова: "Балалар баҡсаларын онотмайыҡ, тәрбиәселәргә ярҙам итәйек", — тигән теләк белдерҙе. Был мәртәбәле йыйындан "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналы ситтә ҡалманы, уның баш мөхәррире Салауат Кәримовтың ҡайнар сәләме рәүешендә һәр уҡытыусыға өсөшәр дана журнал тапшырылды, "Уралым" гәзите мөхәррире Нурия Иксанова үҙ баҫмаларыбыҙға бергәм яҙылырға саҡырҙы.

Төбәк-ара оло йыйын Силәбе һәм Курған өлкәләре туған тел уҡытыусыларының ассоциацияһын булдырҙы, уның етәксеһе итеп бер тауыштан Башҡортостандың Яҙыусылар союзы ағзаһы Ҡамса Мортазинды һайланы һәм һигеҙ пунктtan торған резолюция ҡабул итте.

Аҙаҡтан ҡотлауҙар ҡаралғайны. Әүҙем уҡытыусыларға Башҡортостандың Силәбеләге вәкиллеге әәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы исеменән рәхмәт хаттары тапшырылды. Силәбе дәүләт университетының археология һәм этнография музейына экскурсия ойошторолдо, унда конференцияла ҡатнашыусыларҙы "Бороңғо Арҡайым" менән таныштырҙылар.

**Кинйә, Силәбе ҡалаһы.**

милли саралар

# *Изге Әүлиә шишмәһендә*



***Башҡортостандың Учалы районы Ҡорама ауыл клубында сираттағы "Туған тел – халҡыбыҙҙың тере хәтере һәм рухи байлығы" тигән төбәк-ара семинар булып уҙҙы.***

Быйыл, иһә, семинар 13-сө тапҡыр уҙғарылды. Уны әҙерләп ойоштороусылар — Учалы районының мәғариф бүлеге, район ҡоролтайы һәм Силәбе өлкәһенең Аҡмулла әҙәби берекмәһе. Был бик әһәмиәтле сараның программаһы йөкмәткеле булды: Ҡорама ауыл клубында Әклимә Сафинаның "Ҡайтырбыҙ, тип киткәйнегеҙ ҙә" исемле яңы китабының бик тулҡынландырғыс презентацияһы, унан һуң "Ватаныбыҙ — 100 йыл" тип аталған Силәбе вәкилдәре менән иҫтәлекле осрашыу һәм аҙаҡтан килеп һағынып көтөп алған изге Әүлиә шишмәһенә сәфәр ҡылыу ине.

Был семинар беҙҙе саҡырып, рухландырып, сафландырып торған бик әһәмиәтле сара. Асылда, ул беҙҙең рухи шишмәбеҙ. Изге ергә барып, үҙ-ара рәхәтләнеп, арыу-талыуҙарҙы онотоп аралашып байып ҡайтабыҙ. Ошо матур традициялар йәшәһен дә, уны ойоштороп уҙғарыусыларға рәхмәттәр генә яуһын инде.

**Гөлъямал Нәзмиева, Бәжекәй урта мәктәбе уҡытыусыһы.**

дини йолаларыбыҙ

# *Рамаҙан айы*

***Мосолмандар өсөн Ураҙа илаһи оло байрам. Ул ниндәйҙер аңлата алмаҫлыҡ сихри көскә эйә. Әүәл ауылдара Ураҙа байрамына барыһы ла ихлас әҙерләнә торғайнылар. Бер нисә көн алда өйҙәрен таҙартып, тәртипкә килтереп, Ғәйет көнөндә эштән туҡтата инеләр.***

Әле булһа минең күҙ алдымда: бала-саға уйнарға сыҡҡанда матур кейемдә, малайҙарҙың сәстәре алынған, баштарында түбәтәй, ә ҡыҙҙар яулыҡ ябынғандар, йөҙҙәрҙә шатлыҡ балҡый, кәйефтәр күтәренке. Ишек алдында самауырҙар йырлап ултыра, тирә-яҡйүндә — тәмле ҡоймаҡ, бәлеш еҫтәре. Күршеләр бер-береһен ҡотлап ҡунаҡҡа саҡыра.

Халыҡ байрамды яратып көтөп ала. Уны бигерәк тә беҙ, балалар, ашҡынып көтә инек. Мулла аҙан әйтеп, әүрәтеп намаҙ уҡый, әбей-бабайҙар ураҙа тоталар, ләкин ғәйетте барыһы ла ололап ҡаршы алалар. Бөгөн мулла-хәҙрәттәр, абыстайҙар етерлек, Ҡөрьән уҡытып, вәғәздәр тыңлайбыҙ, әммә диндән алыҫлашҡанбыҙ. Хоҙайҙың тыйғандарынан тыйылып, ҡушҡандарын үтәп йәшәү ят күренешкә әйләнде. Өлкәндәр диндән йыраҡ булғас, балаларҙан ни көтәһең? Балаларҙың ислам дине тураһында бер ни ҙә белмәүендә беҙ үҙебеҙ, ата-әсәләр, уҡытыусылар ғәйепле бит.

**Айдар ИШБЕРДИН.**